Ярҙамсы һүҙ төркөмдәре (6 класс).

Теркәүес.

- 1. Ниндәй теркәүестән ике теркәүес яһап була?
- 2. Ниндәй ике теркәүес һулдан уңға ла, уңдан һулға ла бер үк төрлө уҡыла?
- 3.Ниндәй теркәүес киреһенән уҡығанда ымлыҡҡа әйләнә?
- 4. Бер генә хәрефтән торған теркәүес буламы?

- 5. Ҡайһы теркәүестәр киреһенән уҡығанда ҡылым тмырына әйләнә?

- 6. Түбәндәге һүҙҙәрҙе нисә төрлө аңлап була?
- *Һауала - һауа ла, яғала – яға ла, ярала – яра ла.*
- *7. Әйт,ат, ин, елә, аҙ, кит* һүҙҙәрен теркәүестәргә әйләндерегеҙ.

- 8. «Үгәй» һәм «кәмит» теркәүестәрҙе табығыҙ. Улар ниндәй төркөмгә ҡарайҙар?

Бәйләүес.

- 1. Ҡайһы бәйләүестәр һулдан уңға ла, уңдан һулға ла бер төрлө уҡыла?
- 2. Ниндәй бәйләүесте киреһенән уҡығанда *оран* мәғәнәһендәге исемгә әйләнә?
- 3. Ҡайһы бәйләүесте киреһенән уҡығанда ҡылым тамыры була?
- 4. Составында сифат, исем, һан, рәүеш булған бәйләүестәрҙе һанап сығығыҙ.

- 5. Ниндәй бәйләүес исемдән һәм ымлыҡтан тора?

- 6. Ниндәй бәйләүес ҡылымдың бойороҡ формаһы ла була ала?

- 7. Ниндәй бәйләүес сифат та, ҡылым да була ала?

- 8. Ниндәй бәйләүес исем дә була ала?

Шаян һорауҙар.

-Ниндәй бәйләүес өс өндән тора?

- Ниндәй бәйләүестәр «бойорорға» ярата?

- «Тиҫкәре бәйләүесте табып әйтегеҙ.

Киҫәксә.

- 1. Исем дә булып йөрөй алған ниндәй киҫәксәләрҙе беләһегеҙ?

- 2. Ниндәй киҫәксә киреһенән уҡығанда сифатҡа әйләнә?

- 3. Ниндәй киҫәксәләр ҡылымдың бойороҡ һөйкәлеше лә була?

- 4. Ниндәй киҫәксәләр ымлыҡ та була ала?

- 5. Ниндәй киҫәксәләр киреһенән уҡығанда исемгә әйләнә?
- 6. Ниндәй киҫәксәләр киреһенән уҡығанда ҡылымға әйләнәләр?
- 7. Киреһенән уҡығанда һанға әйләнеүсе киҫәксәләрҙе табығыҙ.
- 8. Киреһенән уҡып ҡайһы киҫәксәне рәүешкә әйләндереп була?

Шаян һорауҙар.

- Киҫәксәләрҙең ҡайһыһы атырға ярай?

- Ниндәй киҫәксәне «ағын»ға әйләндереп була?

Яуаптар *(теркәүес).*

- 1. Йәки: *йә* һәм *ки*.   2. Әллә, әммә.   3. Йә – әй.
- 4. Була: *ә*.   5. Ҙа – аҙ., ла – ал, ни –ин, та – ат, тик- кит.
- 6. Дүрт төрлө: *һауала – һауа* һүҙенең урын-ваҡыт килеш формаһы, *һауалау* ҡылымының тамыр формаһы; *һауа ла* – исем менән **ла** теркәүесе, *һауыу* ҡылымының өсөнсө зат формаһы һәм **ла** теркәүесе һ.б.   7. Йә, та, ла, ни, әле, ҙа, тик.

Гүйә – «үгәй» тимәк – «кәмит». Гүйә –оҡшатыу, тимәк – һөҙөмтә теркәүесе.

Яуаптар *(бәйләүес).*

- 1. Ала, аша, кеүек. 2. Табан – набат. 3. Тыш – шыт.
- 4. **Өс**өн, һым**аҡ**, ш**ике**лле, **төҫ**лө, **һай**ын, ар**ҡыр**ы, б**үтә**н, **баш**ҡа.
- 5. **Ҡар**ай. 6. Аша. 7. Ала. 8. Ҡала, табан.
- 1. Өсөн. 2. Аша, үтә. 3. Арҡыры.

Яуаптар (*киҫәксә*).

- 1. Бит, ҡына, уҡ. 2. Ҡына – аныҡ. 3. Күм, тор, төр.
- 4. Тыр, дор, дөр. 5. Күм – мүк, та – ат. 6. Ла - ал, со - ос.
- 7. Сө – өс. 8. Ҙа – аҙ.
- 1. Уҡ. 2. Ғына.